

# Кәтибә Кинйәбулатованың балалар әҙәбиәтендәге роле

Фәнни эштең авторы: Мортшин Ф.Ф.
Етәксеhе: Фәтихова З.С.



Мин һандуғас булһам, көнө-төнө ,
Алһыҙ-ялһыҙ һайрар инем мин.

**Бурысы:** К.Кинйәбулатованың әсә һәм балаларға бағышланған шиғырҙарын өйрәнеү, балалар өсөн яҙылған әҫәрҙәрен тикшереү

**Маҡсаттар:**

1. К.Кинйәбулатованың тормош юлын өйрәнеү
2. К.Кинйәбулатованың был темаға ҡараған шиғырҙарын тикшереү, идея-эстетик үҙенсәлектәрен анализлау.
3. Шиғырҙарын аңларға булышлыҡ итерҙәй өҫтәлмә сығанаҡтарҙы хеҙмәттәрҙе йыйыу, тикшереү.
4. Уҡыусыларҙа әсәләргә ҡарата һөйөү, кәҙерләү тойғолары уятыу.
5. Хайуандарға, тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.
6. Уҡыусыларҙы эшкә, хеҙмәткә өйрәтеү.
7. К.Кинйәбулатова ижадын өйрәнеү дәрестәрендә һәм дәрестән тыш сараларҙа ҡулланыр өсөн презентациялар әҙерләү.

**Предметы:** К.Кинйәбулатова шиғырҙары

**Объекты:** Шағирә ижадында балалар өсөн яҙылған әҫәрҙәрҙең сағылышы.

**Гипотеза:** К.Кинйәбулатованың был әҫәрҙәре уҡыусыларҙа әсәләргә һәм балаларға һаҡсыл ҡараш тәрбиәләргә, уларға ҡарата һөйөү, ихтирам тойғоларын үҫтерергә ярҙам итә. Кескәй уҡыусылар өсөн яҙылған шиғырҙары тыуған яҡты яратыу, уның матурлығын күрә белергә өйрәтә.

Унының шиғриәтендәге төп йүнәлештәрҙең береһе изгелекле ер булһа, икенсеһе – сәңгелдәкле йыр. Шағирәнең сәңгелдәге ифрат бай йөкмәткеле: ул – сабыйҙың иң тәүге һәм иң кескәй «ватаны» ғына түгел, бәлки әсә йыры аша баланы халыҡ күңеленә әйҙәп ебәреүсе изге түшәк тә, символлаштырылған йәнле бер төйәк тә, оло быуынды киләсәк быуындар менән бәйләүсе эстафетаның өҙөлмәҫ бер төйөнө лә, йәшәү ағасының иң йәш бөрөһө лә.

К.Әхмәтйәнов











Күпте күргән әсә булып, ил-ерен сикhеҙ hөйөүсе ватансы булып, ябай, шат, алсаҡ апай булып та күҙ алдына баҫа шағирә.



Урамда күп бала-сағa

Араһында минең ейәнем,

Ейәнемме, әллә йөрәгемме,-

Икеһендә минең бер йәнем.

«Урамда күп бала-сағa»

Кесе йәштәге балаларҙың хеҙмәткә мөхәббәте тураһында һүҙ алып барғанда, шағирә уларҙың ата-әсәләренә ярҙам итеүҙәрен, «ҡул араһына» инеүҙәрен күрһәтеү менән бергә, киләсәктә кем булыу тураһында хыялдарына зур урын бирә.









Үткән йылдар ниндәй генә йөктәр булып иңдәренә ятмаһын, әҙибә күңелдәрен ниндәй генә борсолоу-яныуҙар әрһеҙләнеп ҡаҡмаһын, Кәтибә Кинйәбулатова арыу-талыуҙы белмәй эшләй, үҙ уҡыусыларын һөйөндөрә килә. Уның кескәйҙәр өсөн ябай ғына тел менән яҙылған һәр бер шиғыры үҙе бер психологик портрет тыуҙыра һәм бик ҙур тәрбиәүи әһәмиәткә эйә.